Научная работа

# ОБРАЗ ЦВЕТКА В БАШКИРСКОЙ И РУССКОЙ СЛОВЕСНОСТИ И ТВОРЧЕСТВЕ С.Т. АКСАКОВА: НА ПРИМЕРЕ СКАЗКИ «АЛЕНЬКИЙ ЦВЕТОЧЕК»

Выполнила: магистрант 2 курса факультета башкирской филологии, востоковедения и журналистики Башкирского государственного университета
Вахитова Илюза Ралифовна

Научный руководитель: доктор филологических наук, профессор, член-корреспондент АН РБ
Гиниятулла Сафиуллович Кунафин

УФА – 2022

## Йөкмәтке

Инеш........................................................................................................3

Беренсе бүлек. Әкиәттәрҙә фантастика һәм сәскә образы ...................................5

1.1.Башҡорт һәм рус халыҡ ижадында сәскә образы ..........................................5

1.2. Башҡорт һәм рус әҙәбиәтендә сәскә образының сағылышы (Ш.Бабич һәм Т. Аксаков әҫәрҙәре миҫалында).........................................................................8

1.3. Әкиәттәрҙә тылсымлылыҡ сағылышы......................................................11

Икенсе бүлек. Т.С. Аксаковтың “Аленький цветочек” әҫәрендә сәскә образы ..........................................................................................................................13

Йомғаҡлау ...............................................................................................................16

Ҡулланылған сығанаҡтар һәм әҙәбиәт исемлеге...............................................17

# Инеш

Башҡорт һәм рус әҙәбиәттәрендә сәскә образының сағылышы халыҡ ижадынан һәм мифологиянан килә. Был мәғәнәлә ышаныуҙар, ырымдар, йолалар, теләктәр, хис-тойғолар, ниндәйҙер бер әйберҙең йә күҙгә күренмәгән хәл-торошто һүрәтләүҙәргә, байрамдарға нигеҙләнгән. Шул нигеҙҙә сәскә образын бер-нисә төркөмгә бүлеп ҡарау мөмкин. Беренсенән, сәскә – ул үҫемлек, матурлыҡ өсөн уны үҫтерәләр, икенсенән, ул медицинала йыш ҡулланылыусы дарыу үләне, уны сәй йә витаминдар менән бергә етештерәләр. Мәҫәлән, ромашка сәскәһе һыуыҡ тейеүҙән һаҡлай. Боланут сәйе шулай уҡ шифалы үләндәрҙән һанала. Уның составындағы витаминдар вирустарҙан, инфекцияларҙан, хатта яман шеш ауырыуының таралыуынан һаҡлай. Өсөнсөнән, ул хис-тойғоларҙы белдереүсе символ, мәҫәлән, рауза сәскәһе – мөхәббәт һәм һөйөү билгеһе, ҡәнәфер – хәтер һәм ҡотлау мәлендә бирелгән сәскә, был осраҡта был сәскәне Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан ветерандарға бүләк итәләр. Дүртенсенән, ырымдарға, тыйыуҙарға бәйле сәскә-образдар. Улар, күбеһенсә, халыҡ ижадында осрай. Мәҫәлән, умырзая сәскәһен өҙөргә ярамай, тиҙәр. Был сәскәне өҙһәң, ғүмерең ҡыҫҡа була, тип әйткәндәр. Бишенсенән, башҡорт һәм рус әҙәбиәттәрендә сәскә шағирҙарҙың һәм яҙыусыларҙың ижадында бирелгән образ. Әҫәрҙәрҙә сәскә образы хис-тойғоларҙы, хәл-торошто белдерә, шуға ла һәр сәскәгә бәйле төрлө ваҡиғалар һүрәтләнергә мөмкин. Алтынсынан, сәскәгә бәйле исемдәр байтаҡ. Уларҙы классификациялау шулай уҡ ышаныуҙарға һәм хис-тойғоларға бәйле. Шулай итеп, алты төркөмдә сәскәгә бәйле ғилми тикшеренеүҙәр өйрәнелә һәм дәлилләнә.

Сәскә тәбиғәттең генә түгел, художестволы образ буларак дөйөм һәм абстракт төшөнсәләргә, идеяларға йән өрә, уларҙы кешенең көндәлек тормошона яҡынайта алыусы тормош күренеше лә булып тора. Сәскә образының ҡулланылышы хис-тойғоларға, ырымдарға, ышаныуҙарға бәйле.

Башҡорт әҙәбиәтендә, мәҫәлән, тыуған ерҙең төҫөн, уйҙар бәйләмен һүрәтләгән әҫәрҙәр бик күп. Мәҫәлән, Талха Ғиниәтуллиндың “Мәтрүшә еҫе” хикәйәһендә Хәбибулла сирләп китә һәм уны дауалауға табиптар өмөт өҙә. Әҫәрҙән алынған өҙөктә мәтрүшкәнең файҙаһы тейеүе һүрәтләнә. Әсә кеше балаһын мәтрүшкә ҡайнатып, уның төнәтмәһендә дауалай. Шуның арҡаһында Хәбибулла аяҡҡа баҫа. Мәтрүшкә образында әсә образы сағылыш таба. Баязит Бикбайҙың “Аҡсәскә” повесында иһә шәхес культы фашланған ваҡиғалар һүрәтләнә. Был осраҡта аҡсәскә образы утыҙынсы йылдарҙағы репрессия ҡорбандарына иҫтәлек, хәтерҙе мәңгеләштергән символ булып тора. Бына ошо йәһәттән, башҡорт һәм рус әҙәбиәте әҫәрҙәрендә сәскә образының сағылышы үҙенсәлектәрен тикшереү – ғилми эштең **актуаллеген** билдәләй.

Ғилми эштә С.Т. Аксаковтың “Аленький цветочек” әкиәтендәге сәскә образын өйрәнеү – төп маҡсат булып тора.

**Ғилми эштең өйрәнелеү кимәле:** башҡорт һәм рус әҙәбиәттәрендә лирик герой һәм тәбиғәт мөнәсәбәттәрен өйрәнеү, анализлау буйынса материалдар һәм мәғлүмәттәр бик аҙ. Шуға

күрә лә С.Т. Аксаковтың “Аленький цветочек” әкиәтендә “Сәскә” образының һынландырылышын өйрәнеү бик мөһим проблема булып тора.

**Ғилми эштең бурыстары**:

- әкиәттәрҙә фантастика һәм сәскә образы өйрәнеү;
- башҡорт һәм рус халыҡ ижадында сәскә образына байҡу яһау;
- башҡорт һәм рус әҙәбиәтендә сәскә образының сағылышы үҙенсәлектәрен асыҡлау;
- әкиәттәрҙә тылсымлылыҡ сағылышын анализлау;
- Т.С. Аксаковтың “Аленький цветочек” әҫәрендә сәскә образының яҡтыртылышы асылын тикшереү;

**Ғилми эштең ғилми яңылығы:** был проблема етешле кимәлдә өйрәнелмәгән, шуныһы менән ғилми эш әҙәбиәт ғилеменә ниндәйҙер кимәлдә булһа ла яңы бит өҫтәгән күренеш булып тора.

**Ғилми эштең теоретик һәм методологик** нигеҙҙәрен башҡорт һәм рус ғалимдарының башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүгә бағышланған тикшеренеүҙәре, ғилми эштәре, һүҙлектәре тәшкил итә. Ул тарихи-сағыштырма анализға нигеҙләнә.

**Сығарылыш квалификация эшенең объекты һәм предметының** мөһимлеге эштең теоретик һәм практик әһәмиәтен билдәләй. Тупланған материалды юғары һәм махсус урта уҡыу йорттарында, мәктәптә башҡорт һәм рус теле дәрестәрендә махсус курстар уҡығанда ҡулланырға мөмкин.

**Ғилми эштең структураһы**: инештән, ике бүлектән, йомғаҡлауҙан һәм ҡулланылған сығанаҡтар һәм әҙәбиәт исемлегенән тора.

## Беренсе бүлек. Әкиәттәрҙә фантастика һәм сәскә образы

### 1.1. Башҡорт һәм рус халыҡ ижадында сәскә образы

Башҡорт халыҡ ижадында сәскә образы халыҡтың ышаныуҙарына һәм ырымдарға бәйле. Сәскәгә бәйле төрлө йолалар, ышаныуҙар, тыйыуҙар һәм һаҡсыл ҡараш йәшәп килә. Был ҡараш мифологияға нигеҙләнгән, сөнки кеше һәр ваҡыт тәбиғәт менән бәйләнештә йәшәгән, уның үҙгәрештәренә иғтибар иткән. Мәҡәл-әйтемдәрҙә, һынамыштарҙа сәскә атамалары йыш ҡулланыла. Мәҫәлән,

*Йүкә сәскәһе ҡойола башлаһа, арыш сәсергә ваҡыт.*

*Миләш һуңлап сәскә атһа, көҙ оҙаҡҡа һуҙылыр. Миләүшә сәскәһе асылһа, көн аяҙыр.*

*Сәскәләр хуш еҫ бөркһә, ямғыр яуыр.*

*Томбойоҡ һыу өҫтөнән ҡәҙимгенән юғарыраҡ күтәрелһә – тиҙ арала ямғыр булыр, сәскәләре асылһа – көн аяҙыр.*

*Муйыл сәскә атһа, көн һалҡынайыуын көт.*

*Шайтан таяғының сәнскеләре ян-яҡҡа таралһа – һауа торошо үҙгәрмәҫ, бергә йыйылһа – көн боҙолор.*

*Ҡара бойҙай сәскәһе бар ерҙә ҡорт тынмаҫ.*[1]

Бында һынамыштарҙың тәбиғәт күренештәренә бәйле булыуы күренә.[2]

Шулай уҡ артыш үләненең мифик көскә эйә булыуына ышанғандар. Артыш тау-ташлы асыҡ ерҙә үҫә торған үҫемлек. Ылыҫлы үлән сәскә атып, орлоҡтар сәсә. Өлгөргән артышты элек һәр бер өйҙөң мөйөшөнә ҡуйғандар. Мәҫәлән, Ф.Г. Хисметдинованың “Мифологик һүҙлег”ендә артышҡа бәйле ырым-ышаныуҙарға миҫалдар ярайһы күп килтерелә.

Ҡымыҙ етештергәндә, шулай уҡ ҡайһы бер сәскәләрҙе ҡушып бешәләр. Был хәлдә ҡымыҙҙың сифаты һәм шифаһы ҡеүәтлерәк була.

Рус халыҡ ижадында шулай уҡ үҫемлектәрҙең сәскә атыуына һәм емеш биреүенә ҡарап, тәбиғәт торошон күҙәткәндәр. Мәҫәлән,

- если на рябине появились объёмные белые цветки, на улице будет жара и безоблачное небо
- щавель растет дружно – к мало дождливому лету
- сорванный хвощ выделяет обильно сок – к жаре
- лиственница распушилась – к тёплой, солнечной погоде
- если распускаются фиалки, скоро наступят теплые дни
- папоротник закручивается рогульками – к засухе
- Мать-и-мачеха зацвела, значит, заморозков уже не будет

---

[1] https://nazir1965.com/bez-rubriki/hynamyshtar-yshanyuҙar.html

[2] Башҡорт халыҡ ижады. 10-сы том. 1-се китап. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. - Өфө: Китап, 2006. – 56-57 биттәр

- На одуванчиках закрылись бутоны – скоро начнётся ливень
- На розах опадают лепестки – к дождливой погоде[3]

Сәскәгә бәйле мәҡәл-әйтемдәрҙә шулай башҡорт халҡының ышаныуҙары урын алған. Шулай уҡ сәскә образы үлән, гөл һәм ашлыҡтар менән бер мәғәнәлә йөрөй. Уларҙы тәфсирләгәндә кешенең эшенә, йәшәйешенә, торошона бәйле. Мәҫәлән,

***"Гөл" мәғәнәһендә мәҡәл-әйтемдәр:***

*Гөл ҡәҙерен былбыл белер.*

*Гөл тиканһеҙ (сәнскеһеҙ) булмаҫ.*

*Гөлөнә ҡарама, төбөнә ҡара.*

***"Үлән" мәғәнәһендә мәҡәл-әйтемдәр:***

*Андыҙлы ерҙә ат үлмәҫ, атлы ерҙә ир үлмәҫ.*

*Йәш үләндә арыҡ мал да уйнаҡлай.*

*Киндер сәсһәң, кулдәк кейерһең.*

***"Сәскә" мәғәнәһендә мәҡәл-әйтемдәр:***

*Сәскәне ваҡытында өҙөү фарыҙ.*

*Һары сәскә туҡлыҡҡа, күк сәскәһе – юҡлыҡҡа.*

*Һәр сәскәнең үҙ еҫе, һәр халыҡтың үҙ төҫө.*

*Матур **сәскә** сәнскеле була.*

*Яҙҙың йәме сәскә менән, көҙҙөң йәме көлтә менән.*[4]

Мәҡәл-әйтемдәрҙең мәғәнәһе бай һәм төрлө. Башҡорт халҡында "сәскәләй ғүмере", "сәскә кеүек матур", "сәскә кеүек балҡып ултыра", "сәскә кеүек күркәм", "сәскәләй сағы" "ал да гөл", "сәскә күңеле" һүҙбәйләнештәре йыш осрай. Шул мәҡәл-әйтемдәргә лә матурлыҡ, ашлыҡ биреүсе, тыуған ергә яҡын булыуҙы, яратыуҙы белдерә.

Сәскәләргә бәйле исемдәргә лә изгелек юрау, матур яңғыраһын, сәскәләй матур булһын мәғәнәһе менән ҡыҙ балаларға шундай исемдәр ҡушҡандар: Миләүшә, Гөлсәскә, Лилиә, Ләлә, Алсәскә, Рауза, Сәскә, Сәскәбикә, Нәркәс һ.б. Сәскә образы гөл мәғәнәһендә исемдәрҙә күберәк ҡулланыла. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың гөл һүҙенә бәйле исемдәр бик күп: Гөлгөл, Гөлгөнә, Гөлиә, Гөлсинә, Миңлегөл, Айгөл, Наҙлыгөл, Нургөл, Наҙлыгөл һ.б.

---

[3] Кравцов Н.И., Лазутин С.Г. Русское устное народное творчество: Учебник для фил. спец. ун-тов. – 2-е изд., испр. и доп. – М.: Высш. шк., 1977. – С. 187.

[4] Башҡорт халыҡ ижады = Башкирское народное творчество : әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады : сказки, предания, устные рассказы, творчество сэсэнов / мөх. Л. Бараг ; Н. Зарипов ; Кирәй Мәргән ; Ғ. Хөсәйенов ; төҙ. Н. Т. Зарипов; А. М. Сулейманов .– Өфө : Башҡортостан китап нәшриәте, 1982 .– 276-298-се биттәр

Рус телендә, рус халыҡ һәм яҙма әҙәбиәтендә шулай уҡ сәскәгә бәйле исемдәр байтаҡ: Жасмин, Георгина, Виола, Купава, Лилия, Лилиана, Мимоза, Оливия, Петуния, Полева, Роза, Сюзанна, Тамара һ.б. Бирелгән һынамыштарҙа сәскә атамалары ҡулланыла:

Аленький цветок бросается в глазок.

Апрель – цветень.

Без матушки родной и цветы не цветно цветут.

Без тебя не цветно цветы цветут, не красно дубы растут в дубровушке.

В цвету трава – косить пора.

Весна красна цветами, а осень снопами.

Всякая слава человеческая яко цвет цветет.

Вянет и красный цвет.

Где цветок, там и медок.

Закрыт цветок фиалки – жди дождя.

Июнь – разноцвет.

Красная девка в хороводе, что маков цвет в огороде.

Листочки клевера перед дождём выпрямляются.

Не верь гречихе в цвету, а верь в закрому.

Один, как маков цвет, как красное солнышко.

Отцветают розы – падают холодные росы.

Расцветает, что маков цвет.

Роза – королева цветов.

Цвели цветики, да поблекли, любил молодец красну девицу, да на войну ушёл.[5]

Шулай итеп, тәбиғәт күренештәре менән рухи тормош араһында булған күҙгә күренмәгән нескә бәйләнеш уңышлы тотоп алына һәм күңел тирбәлештәрен эмоциональ-эстетик яҡтыртыу мәсьәләһенә отошло хеҙмәт иттерелә.

Әйтем-мәҡәлдәрҙең күпселеге халыҡтың тәбиғәтте һәм ижтимағи тормошто күҙәтеүе, тәжрибә нигеҙендә тыуған. Көнкүреш тәжрибәһе, кешеләр араһындағы әхлаҡ нормалары, ҡайһы бер тарихи ваҡиғалар, тәбиғәттәге төрлө күренештәр, йәғни халыҡтың бай, күп яҡлы һәм ҡатмарлы тормошо, тәрән йөкмәткеле, образлы мәҡәлдәр рәүешендә формалашҡан. Йөҙәрләгән, меңәрләгән мәҡәлдәр тик хәл-ваҡиғаларҙы оҙаҡ йылдар күҙәтеү, уларҙы өйрәнеү һәм белеү һөҙөмтәһендә генә барлыҡҡа килә алған.[6]

---

[5] Кравцов Н.И., Лазутин С.Г. Русское устное народное творчество: Учебник для фил. спец. ун-тов. – 2-е изд., испр. и доп. – М.: Высш. шк., 1983. С.189

[6] Башҡорт халыҡ ижады = Башкирское народное творчество : әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады : сказки, предания, устные рассказы, творчество сэсэнов / мөх. Л. Бараг ; Н. Зарипов ; Кирәй Мәргән ; Ғ. Хөсәйенов ; төҙ. Н. Т. Зарипов; А. М. Сулейманов .– Өфө : Башҡортостан китап нәшриәте, 1982 .– 422 б.

Башҡорт һәм рус ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемдәрендә, биҙәүестәрендә, аш-һыу һауыт-һабаларында, яҫтыҡ-юрған тыштарында, балаҫтарҙа, аяҡ кейемдәрендә сәскә орнаменттары борон-борондан һаҡланып килә. Сәскәләрҙең һырланыуы яман күҙҙән һаҡлауҙы белдергән. Сәскә орнаменты өйгә ҡот өҫтәгән, биҙәгән. Был хәлдә беҙ сәскә нағышын матурлыҡ символы итеп күрәбеҙ. Төньяҡ районДарҙа башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеме – альяпҡыстарҙа ҡулдан сәскәләр сигәләр. Ҡульяулыҡҡа сәскә сигеп, бүләктәр бирешкәндәр. Сәскә таждарын йыйып, төҫтәр эшләгәндәр. Көндәлектә сәскәләрҙең файҙаһы шаҡтай ҙур булған.

Шулай итеп, башҡорт һәм рус халыҡ ижадында сәскә образы киң ҡулланылыш алған. Мифологияла ышаныуҙарға бәйле булһа, йәшәйештә уларҙың башҡорт халҡының көнкүрешендә мөһим сығанаҡ булыуы күренә.

## 1.2. Башҡорт һәм рус әҙәбиәтендә сәскә образының сағылышы (Ш.Бабич һәм Т. Аксаков әҫәрҙәре миҫалында)

Көнсығышта күп быуаттар дауамында сәскәләр хис-тойғоларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡулланыла. Сәскә – фекер һәм хистәр бәйләнеше. Мөхәббәт сәскәләре булып сейә сәскәһе, аҡ ҡәнәфер – ышаныс билдәһе, ҡыҙыл рауза – һөйөү, астра – көтөү тора. Урта быуаттарҙа һөйөү билдәһе булараҡ роза ҡулланыла. Японияла көс, бәхет, оҙон ғүмерлелекте ҡарағай кәүҙәләндерә, яңырыуҙы һәм мәңгелек өмөттө – слива ағасы, алма сәскәһе – ғаиләгә бәхет теләүҙе аңлата. Барлыҡ халыҡта тиерлек мөхәббәт символы – роза, ә боронғо гректарҙа тынлыҡты белдерә. Япондар өсөн ирис – ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ символы, сакура сәскәһе – тоғролоҡ билдәһе.

Тәбиғәтте өйрәнеү, күҙәтеү, ҙур ҡыҙыҡһыныу һәм ихтирам уятыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән символдар сәскәләргә бәйле. Йыш ҡына халыҡтарҙа сәскәләр аңлатаһы айырыла. Миф һәм легендаларҙа сәскәгә бәйле символикаһы ваҡиғалар ҙа байтаҡ.

Ландыш – таҙалыҡ, наҙ, тоғролоҡ, мөхәббәт һәм бәхет символы.

Ҡыңғырау сәскә - һөйөү һәм намыҫлылыҡ символы. Ышаныуҙар буйынса, бәхет, мөхәббәт килтерә, ә ололарға – тыныс ҡартлыҡ. Риүәйәт буйынса, ҡыңғырауҙарҙы аттарҙың дуғаһына ҡуйғандар. Ул юл буйы яңғырап, юлына эҙҙәр ҡалдырған. Шул урындарҙа сәскәләр үҫеп сыҡҡан.

Ромашка (Аҡ сәскә) – тыныслыҡты һәм тәбиғәт араһындағы бәйләнеште белдерә.

Элек ҡыҙҙар туғайлыҡҡа ромашкалар йыйып, сәс үргән, таж эшләгән. Ромашка сәскәһе мәғәнәһе - беренсе мөхәббәт, ғәйепһеҙлек, тыйнаҡлыҡ, ихласлыҡ.

Роза йәки Рауза - ул мөхәббәт символы. Уның төҫө лә ҙур роль уйнай. Танышыу, бергә булыу, һөйөү белдереү һ.б.

Сирень - матурлыҡ, мөхәббәт билгеһе. Ырым буйынса йорт алдына сирень ағасы ултыртыу – яҡшылыҡ билдәһе.

Башҡорт һәм рус шиғриәтендә "Сәскә" образын өйрәнгәндә сәскә төрҙәренә ҡағылышлы шиғырҙарҙың тематикаһы һәмм идеяһы төрлө булыуы күренә. Уларҙың төрҙәренә иғтибар иткәндә, миҫалдар килтереп нығытыу мөһим.

Беренсе миҫал булып, ҡурай сәскәһе образы тора. Башҡорт флагында ҡурай образы - дуҫлыҡ символы, уның аҡ буй уртаһында урынлашҡан ете таж япрағы Башҡортостан Республикаһы территорияһында йәшәүсе халыҡтарҙың берләшеүенә нигеҙ һалыусы ете ырыуҙы символлаштыра. Ш. Бабичтың "Ҡурайҡайға" шиғырында ҡурай башҡорт халҡының тарихын, ҡатмарлы, драматик яҙмышын бәйән итеүсе быуындар бәйләнешен белдерә, шуның менән бер рәттән контраст рәүешендә башҡорт ере тәбиғәтенең матурлығын, гүзәллеген сағылдыра:

Һыҙғырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,
Өҙҙәрт, ҡурай, йәрәккәй ҡылдарын;
Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙәрт, һөйләп башҡорт моңдарын.
Һөйлә Һаҡмар, Яйыҡ, Ашҡаҙарҙы,
Һөйлә йәмле Урал буйҙарын;
Һөйлә ожмах кеүек сәхрәләрҙе,
Йәйелеп ятҡан йылҡы, ҡуйҙарын.
Һөйлә йәйләүҙәрҙә йәйҙе йәйләп,
Ҡырҙан ҡырға күсеп ҡуныуҙы;
Һөйлә ҡашмау кейеп, селтәр бәйләп,
Ҡырҙа йырлап йөрөгән һылыуҙы.
Һөйлә елберләгән таллыҡтарҙы
Шылтырап аҡҡан шишмә буйында;
Һөйлә күбәләктәр, бал ҡорттарҙы
Уйнап осҡан сәскә ҡуйынында.
Һөйлә тарихыңдан, яуҙарыңдан,
Һөйлә ҡанлы башҡорт болаһын;
Һөйлә олатайҙар хәлдәренән,
Йөрөш, торош, заңын, йолаһын...[7]

Хәҙер Т.С. Аксаковтың "Роза и пчела" шиғырында күҙ һалайыҡ. Унда сәскә образы йәнләндереү менән бирелә. Һүрәтләү сараларын белеү яҙыусы өсөн дә, әҙәбиәт ғилемен өйрәнеүсе өсөн дә, телсе өсөн дә бик әһәмиәтле. Сөнки был саралар әҙәбиәттең тәбиғәтенә тәрәнерәк үтеп инергә мөмкинлек бирә. Һүрәтләү саралары телде биҙәкләү, поэтик аһәңлек менән тулыландырыу өсөн кәрәк.

Билдәле булыуынса, әҙәби әҫәрҙәрҙә тәбиғәт күренештәрен йәнле әйберҙәр менән сағыштырыу һөйләмдең нәфислеген арттыра. Был күренеште Т. Аксков шиғырҙарында асыҡ күрергә мөмкин. Тәбиғәт есемдәрен кешеләштереп тасуирлау шиғырҙы йәнлерәк һәм йәмлерәк, эмоциональ тәьҫирлерәк итә. Шуға өлгәшеүҙең бер формаһы йәнләндереү. Ул асылда. метофорик

[7] Ҡурайҡайға. Шәйехзада Бабич - Wikisource

һүрәтләү сараларының бер төрө. Йәнләндереүгә йәнле күренештәрҙең сифаттарын йәнһеҙ күренештәргә күсереп биреү хас.[8]

В саду, цветами испещренном,
В густой траве, в углу уединенном
Прелестная из роз цвела;
Цвела спокойно, но – довольна не была!
Кто завистью не болен?
Кто участью своей доволен?
Она цвела в глуши; но что ж в глуши цвести?
Легко ль красавице снести?
Никто ее не видит и не хвалит;
И роза всех подруг себя несчастней ставит,
Которые в красивых цветниках
У всех в глазах
Цвели, благоухали,
Всех взоры, похвалы невольно привлекали.

Йәнләндереү – беҙҙә уратып алған ысынбарлыҡ, тәбиғәт күренештәрен кешеләргә хас сифаттар менән йәнле итеп һынландырырға ынтылыу. Бындай осраҡтарҙа шағир фантазияһы ярҙамында, тәбиғәт күренештәре лә, тирә-йүндәге әйберҙәр ҙә, кешеләрсә хәрәкәт итеп, хатта һөйләшеп китеүсән. Поэтик йәнләндереү сараһы йәнһеҙ нәмәләргә, гүйә, йән өрә. Тәбиғәт есемдәрен кешеләштереп тасуирлау әҫәрҙе йәнлерәк һәм йәмлерәк, эмоциональ тәьҫирлерәк итә.

Сказала ей пчела: «Напрасно ты вздыхаешь,
Винишь судьбу свою;
Ты счастливее их, на опыте узнаешь».
Что ж? так и сделалось! Все розы в цветниках
За то, что были на глазах,
Все скорой смертью заплатили.[9]

Йәнләндерелеп бирелгән шиғыр юлдарында Роза һәм Бал ҡорто араһындағы мөнәсәбәт нигеҙендә кешелек сифаттары асыла. Был алымда тәбиғәт күренештәре менән персонаждарҙың күңел кисерештәрен йәнәшә ҡуйып һүрәтләү ынтылыштары ла күҙәтелә. Тәбиғәт күренештәрен йәнләндереү, уның менән кеше кисерештәре араһындағы бәйлелекте күрһәтеү лирик герой тойғоларын ваҡиғаларға ҡушыу һәм уҡыусы зиһенен дә шуларға актив мөнәсәбәткә йәлеп итеү алымы Т. Аксаков шиғырында тәрән мәғәнә белдереү, ҙур эстетик бурыс үтәү сараһы булып әүерелә.

---

[8] Хөсәйенов Ғ.Б. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө: Китап, 2010. –38-се бит.
[9] Роза и пчела — Аксаков. Полный текст стихотворения — Роза и пчела (culture.ru)

Шулай итеп, ҡарап үтелгән әҫәрҙәрҙә сәскә образы автор позицияһына ҡоролған, шуға ла был образ төрлө тематикала бирелә. Ҡайһы бер осраҡта, сәскә образы ыңғай һәм кире юҫыҡта нигеҙләнә.

## 1.3. Әкиәттәрҙә тылсымлылыҡ сағылышы

Билдәле булыуынса, әкиәттәр – халыҡ ижадының төп жанрҙарының береһе. Уларҙың барлыҡҡа килеүе кешелек дәүеренең иң боронғо осорҙарына ҡайтып ҡала. Шулай булһа ла, фәндә әле булһа әкиәттәрҙең аныҡ ҡына билдәләмәһе юҡ. Әкиәт тип, ғәҙәттә, уйҙырмаға нигеҙләнгән тылсымлы һәм мажаралы йөкмәткеле йә булмаһа көнкүреш характерындағы хикәйәгә әйтәләр.

Башҡорт халыҡ әкиәттәренең сығанағы халыҡ фольклорында ғына түгел, шулай уҡ әҙәбиәт сюжеттарында ла.

Башҡорт халыҡ әкиәттәренең күпмелер өлөшө һинд халҡының әҙәби-фольклор һәйкәлдәре «Джатаки», «Панчатантра», «Шукасаптати», «Тути-наме» менән бәйләнгән. Был әҫәрҙәрҙең ҡайһы бер әкиәт сюжеттары башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында сағылыш тапҡан. Был Урал-Волга буйы регионының Көнсығыш илдәре менән мәҙәни бәйләнештәрен дәлилләй: тимәк, халҡыбыҙ ғәрәп-мосолман яҙмаһы һәм китап мәҙәниәте менән таныш булған. «Калила һәм Димна» һәм «Тути-наме» әҫәрҙәренең ҡулъяҙмаһы Иҙел (Волга) буйында һәм Көньяҡ Уралда таралған, XIX быуатта улар төрөк тәржемәһендә һәм ғәрәп телендә баҫылып сыҡҡан.[10]

Халыҡ араһында билдәле әҫәрҙәрҙең сюжеты ябайлаштырылған, килер быуынға телдән тапшырылған, өлөшләтә халыҡтың яҙма традициялары менән алмаштырылған милли әкиәт репертуарына индерелгән.

Тылсымлы әкиәттәр – әкиәт жанрының иң боронғо төркөмдәренең береһе. Уларҙың барлыҡҡа килеүе, ғалимдарҙың дөйөм фекеренсә, тәүтормош-ырыусылыҡ ҡоролошоноң емерелә башлаған осорона тап килә. Бына шуға күрә лә әкиәт батырының кәләш эҙләүе – бындай әкиәттәрҙә киң таралған мотивтарҙың береһе. Миҫалға «Һунарсы Байғужа», «Ҡояш ҡыҙ» һымаҡ әкиәттәрҙе килтерергә мөмкин. Тылсымлы әкиәттәрҙә боронғо кешеләрҙең үҙҙәрен тәбиғәт донъяһынан айырып ҡарамаған замандарының сағылышы бар. Уларҙа анимизм, тотемизм күренештәре ҙур урын алған. «Үгеҙ» исемле әкиәттә, мәҫәлән, үгеҙ хан ҡыҙына әйләнә, үгеҙ тиреһен һалғас, ул күреп туймаҫлыҡ матур егеткә әйләнә, ә ҡатыны ул тирене утҡа яҡҡас, аҡҡош булып осоп сығып китә, һуңынан, төрлө мажаралар үтеп, егет булып ҡатыны янына ҡайта.[11]

Тылсымлы әкиәттәрҙең барыһы өсөн дә үтә характерлы булған мотив – ул изгелек һәм яуыҙлыҡ көрәше. Бында бер-береһенә ҡаршы булған ике яҡ менән осрашабыҙ: бер яҡта яуыҙ батша йәки хан, үгәй әсә, убырлы ҡәйнә булһа, икенсеһендә – таҙ батыр, етем ҡыҙ, йәберләнгән

---

[10] Башҡорт халыҡ әкиәттәре — Башҡорт Википедияһы (wikipedia.org)

[11] Кульсарина Г.Г. Язык и стиль башкирских народных сказок: дис. …канд. филол. наук. – Уфа: БашГУ, 2004. – 165 с.

килен һ. б. Шуны әйтергә кәрәк, әкиәт һәр саҡ кәмһетелгән, үгәйһетелгән персонаждарҙың еңеүе менән тамамлана.

Үҙҙәренең йөкмәткеһе, образ, сюжеттарының оҡшашлығы менән тылсымлы әкиәттәр бер төрлө булып күренһәләр ҙә, һуңғы ваҡытта М.Х. Минһажетдинов төркөмләүе буйынса уларҙы саф тылсымлы һәм тылсымлы героик әкиәт төрҙәренә бүлеп йөрөтөлә.[12]

Йыйып әйткәндә, тылсымлы әкиәттәрҙең сюжеты ифрат күп төрлө. Төрлө мифик заттарға ҡаршы көрәш, үгәй әсә менән үгәй ҡыҙ, убыр ҡәйнә менән бахыр килен, һатылған бала, кесе ул, уның, төрлө һынауҙар үтеп, батша ҡыҙына өйләнеүе, хатта батша, вәзир булып китеүе – тылсымлы әкиәттәрҙең иң киң таралған сюжеттары иҫәбендә.

Шулай итеп, әкиәттәр башҡорт халыҡ ижадының бай мираҫын тәшкил итә. Бер үк әкиәттең бер нисә вариантта йөрөүе, шулай уҡ бер үк сюжеттың төрлө халыҡта төрлөсә милли ерлек алыуы йәки төрлө төбәктәрҙә төрлө үҙенсәлектәргә эйә булыуы жанрҙың үҙгәреүсәнлегенән килә. Әкиәттәр, фольклорҙың башҡа жанрҙарына ҡарағанда, иркенерәк вариантлаша, бер сюжет икенсеһе менән ҡушылып (контаминация), оҡшаш әкиәттәр тыуа. Шул уҡ ваҡытта, әкиәт жанрының бөтә тарихи дәүерҙәр өсөн дә уртаҡ булған, заман ағышына еңел генә бирелмәй торған һыҙаттары бар. Шуларҙың береһе һәм иң мөһиме – әкиәттәрҙең фантастикаға, уйҙырмаға, булмағанды һөйләүгә ҡоролоуы. Башҡорт фольклорсылары әкиәттәрҙе классификациялауҙа бер-береһен тултырыусы ике төрлө принципты иҫәпкә ала – фантастик уйҙырма һәм төп конфликттың характеры. Ошо күҙлектән сығып, башҡорт халыҡ әкиәттәрен түбәндәге төркөмдәргә бүлеп йөрөтәләр: 1) хайуандар тураһындағы әкиәттәр; 2) тылсымлы әкиәттәр; 3) батырҙар тураһындағы әкиәттәр; 4) тормош-көнкүреш әкиәттәре. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: сатира һәм юмор, ғибрәт биреү, фәһем сығарыу әкиәттәрҙең бөтә төркөмдәренә лә хас. [13]

[12] Сөләймәнов Ә.М. Башҡорт халҡының ҡарһүҙе [Текст]: филология факультеты студенттары һәм әҙәбиәт, мәҙәниәт уҡытыусыларына тәғәйен уҡыу ҡулланмаһы. Беренсе кисәк. – Өфө: БДПУ нәшриәте «Вагант», 2011. – 67-се бит.

[13] Башкирское народное творчество. Том 5. Бытовые сказки. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1990. – 496 с.

## Икенсе бүлек. Т.С. Аксаковтың “Аленький цветочек” әҫәрендә сәскә образы

Әкиәт – халыҡ ижадының бер төрө: күбеһенсә фантастик ваҡиғалар тураһында уйлап сығарылған эпик сәсмә әҫәр.[14] Бөтә халыҡтарҙа ла фольклорҙың иң боронғо һәм иң күп таралған формаларының береһе булараҡ, әкиәттәрҙә халыҡтың милли үҙенсәлектәре, ғөрөф-ғәҙәттәре, тормош-көнкүреше сағыла.

Тәбиғәт көстәрен һәм күренештәрен ниндәйҙер серле көс, мөғжизә рәүешендә ҡабул итеүҙең образлы сағылышын башҡорт халыҡ ижады ерлегендә лә күп кенә күрергә мөмкин.

Сергей Аксаков әҫәрҙәре нигеҙендә авторҙың тел сараларына һәм образлылыҡҡа бай яҙыусы булыуы күренә. Йәнләндереү ярҙамында Сергей Аксаков уҡыусының хәтерендә ҡалырлыҡ картина, тәбиғәт күренештәре ижад итә. Тәбиғәт күренештәрен тасуирлағанда уны кешеләргә хас сифаттар менән йәнле итеп һынландырырға ынтыла. Быңдай осраҡтарҙа автор фантазияһы ярҙамында, тәбиғәт күренештәре лә, тирә-йүндәге әйберҙәр ҙә, кешеләрсә хәрәкәт итеп, хатта һөйләшеп китеүсән. Поэтик йәнләндереү сараһы йәнһеҙ нәмәләргә, гүйә, йән өрә.

Реаль ысынбарлыҡтағы предмет, күренеш, хәл-ваҡиғалар бер-береһенә тышҡы билдәләре менән дә, эске төҙөлөштәре менән дә оҡшарға мөмкин. Халыҡтың йәнле һөйләү теле менән әҙәби телдә ике предмет, күренеш, хәл-ваҡиғаларҙың айырым киҫәктәре, өлөштәре, яҡтары араһындағы оҡшашлыҡҡа нигеҙләнгән метафоралар бигерәк тә киң таралған.

Үҙенең “Аленький цветочек” әҫәрендә С.Т. Аксаков тәбиғәт йырсыһы булараҡ уны бөтә төҫтәрендә, һәр яңы үҙенсәлектәрендә күрә һәм ишетә белә, мең төрлө биҙәк буяуҙарын, хис-тойғо нурҙарына төрөп, кеше күңелдәрендә ҡабыҙа, тормошҡа, йәшәүгә, бер-береңде һөйөүгә рухландыра.[15]

Тәбиғәт күренештәрен, әйберҙәрҙе һөйләштереү рәүешендә (йә монолог, йә диалог формаһында) һүрәтләү ҙә йәнләндереүҙең шулай уҡ киң таралған бер ысулы. Йәнләндереү һүрәтләү сараларының иң йәнлеһе ул.

Йәнләндереүҙең кереһе – тәбиғәт күренешен төҫһеҙләп йә әйберҙе, уй-тойғоно ҡатырып ҡуйыу ҙа ҡай саҡ көтөлмәгәнсәрәк эффект бирә. Йәнләндереүҙәр – метафорик һүрәтләү сараларының бер төрө ул асылда. Уларға йәнле күренештәрҙең сифаттарын йәнһеҙ күренештәргә күсереп биреү хас. Йәнләндереү һүрәтләү сараларының иң йәнлеһе ул.

С.Т.Аксаков ижад процесында: төрлө тәбиғәт күренештәрен һүрәтләгәндә, кешелек йәмғиәтендәге ҡатмарлы хәл-ваҡиғаларҙы тасуирлағанда, герой, персонаждарға, уларҙың уй-фекерҙәренә, хис-тойғоларына, физик, физиологик һәм психологик хәлдәренә характеристика

---

14 Әкиәт — Башҡорт Википедияһы (wikipedia.org)

15 Аленький цветочек ONLINE. Афиша. www.filspb.ru. Дата обращения: 21 мая 2020. Архивировано 20 сентября 2020 года.

биргәндә – эйәртеүле ҡушма синтаксик конструкцияларҙы оҫта ҡуллана: "... младшая – самая любимая – аленький цветочек, краше которого нет во всём белом свете".

Әҫәрендә яҙыусы тел материалын унда бәйәнләнгән хәл-ваҡиғаларға, әҫәрҙең геройҙарының холҡона, тәбиғәт ҡырыҫлығына бәйле рәүештә һайлаған. Был автор теленең иҫ киткес бай булыуы тураһында һөйләй. Шуның арҡаһында әҫәрҙә тәбиғәт күренеше менән персонаждың рухи йәшәйеше араһында үҙенә бер төрлө гармония барлыҡҡа килә:

"...Видит он много цветочков аленьких, но никто не может поручиться, что краше этого цветочка нет во всём свете....

"А в том саду цветут цветы распрекрасные, летают птицы невиданные и песни поют райские. Вдруг видит купец цветочек аленький, красоты невиданной. Сорвал купец цветочек, в тот же миг блеснула молния, ударил гром, и появился перед купцом зверь не зверь, человек не человек, чудище страшное и мохнатое. Заревело чудище на купца. Как же он отблагодарил за гостеприимство, сорвал цветочек его аленький, единственную утеху в жизни его! "

Урыны менән автор юғары художестволыҡҡа өлгәшеү өсөн портрет характеристикаларын киңерәк итеп тә бирә. Ысынбарлыҡты художестволы ҡабул итеүҙә, тәбиғәтте, кешеләрҙең эске донъяһын һүрәтләүҙә ул синтетик һәм аналитик сағыштырыуҙарҙың стилистик мөмкинлектәрен тулы файҙалана белә. Мәҫәлән: "Взяла она цветочек аленький, надела на мизинец перстень и очутилась во дворце чудища.".

Һүрәтләү йәки хикәйәләү өҫтөнлөк алған әҫәр йөкмәткеһе билдәле бер символик мәғәнәгә эйә булмаған ябай тәбиғәт күренештәренән дә торорға мөмкин. Уларҙа пейзаж деталдәре, картиналары түгел, ә ошо күренештәр ярҙамында тыуҙырылған кәйеф, күңел торошо мөһим. Йәнләндереү – әйберҙәрҙең үҙ-ара оҡшашлығына нигеҙләнгән троптарҙың береһе, автор унда тере заттарға хас булған эш-хәрәкәтте, сифатты, уй-тойғоларҙы тәбиғәт күренештәренә, йәнһеҙ әйберҙәргә йәки абстракт төшөнсәләргә күсерә. Бына шуға бер миҫал: "А на пригорке, где растёт цветочек аленький, лежит зверь лесной бездыханный. Подбежала к нему девица, обняла его голову безобразную, противную и закричит истошным голосом: "Ты встань, пробудись, мой сердечный друг, я люблю тебя как жениха желанного!""[16]

Үҙенең әҫәрҙәрендә С.Т. Аксаков әхлаҡ мәсьәләләрен үҙәккә ҡуя, әҙәплелек менән наҙанлыҡты контраст планда һүрәтләй, Үрҙә ҡарап үтелгән әҫәрендә ул кешеләр ысын бәхетте фәҡәт тәбиғәт ҡосағында ғына таба ала тип раҫлай.

Ғөмүмән, С.Т. Аксаковтың әҫәрҙәрендә халыҡ аҡылы, аңы, зиһене – киң сағылыш таба. Яҙыусы үҙ уҡыусыһын тормош ваҡиғалары, геройҙарының ҡылыҡ-фиғелдәре аша ғына түгел, әҫәрҙәрендә тел-һүрәтләү сараларының уңышлы ҡулланылышы менән дә тәрбиәләй. Уның әҫәрҙәре аша халыҡтың тел байлығына, матур камиллығына, яғымлылығына тағы бер инанаһың. Яҙыусының Ообразлы фекерләүҙең тәрәнлегенә ынтылыуы һүрәтләү сараларының тәбиғәтенә яңыса ҡарарға өйрәтә. Автор был сараларҙы әҙәби биҙәк рәүешендә генә ҡулланмай. Троптарҙың идея-эстетик йөкмәткеһен бермә-бер арттырыу,

[16] Аленький цветочек. Сказка ключницы Пелагеи - Аксаков С.Т. (azbyka.ru)

хатта ваҡыты менән уларҙы символ юғарылығына күтәреү уның әҫәрҙәренең йөкмәткеһе яғынан ифрат тос булыуына килтерә. Яҙыусы әҫәрҙәрендәге тәбиғәт күренештәре – ул ысынбарлыҡтағы тәбиғәттең тура күсермәһе түгел, ә лирик герой тарафынан һайлап алынған, ҡабул ителгән картиналар, уның аңы, күңеле аша үтеп, үҙенсәлекле эшкәртелгән күренештәр.

## Йомғаҡлау

Ғилми эштә сәскә образының халыҡ ижадында һәм башҡорт, рус әҙәбиәттәрендә сағылышы традицияларына ҡыҫҡаса ғына байҡау яһалды, С.Т. Аксаковтың “Аленький цветочек” әҫәрендәге сәскә образын анализлауға шаҡтай иғтибар бүленде.

Беренсе бүлектә әкиәттәрҙә фантастика һәм сәскә образы ҡаралды. Шул нигеҙҙә башҡорт һәм рус ижадында, әҙәбиәтендә сәскә образының сағылышы өйрәнелде. Шулай уҡ әкиәттәрҙә тылсымлылыҡ үҙенсәлеге тикшерелде.

Тәбиғәтте өйрәнеү, күҙәтеү, ҙур ҡыҙыҡһыныу һәм ихтирам уятыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән символдар сәскәләргә бәйле. Йыш ҡына халыҡтарҙа сәскәләр аңлатмаһы айырыла. Миф һәм легендаларҙа сәскәгә бәйле символик мәғәнәле ваҡиғалар ҙа байтаҡ.

Башҡорт һәм рус халыҡ ижадында сәскә образы халыҡтың ышаныуҙарына һәм ырымдарға бәйле. Халыҡтың күңел донъяһында, көндәлек эшмәкәрлегендә сәскәгә бәйле төрлө йолалар, тыйыуҙар һәм һаҡсыл ҡараш йәшәп килә. Был ырым-ышаныуҙар мифологияла нигеҙләнгән, сөнки кеше һәр ваҡыт тәбиғәт менән бәйләнештә йәшәгән, уның үҙгәрештәренә иғтибар иткән.

Башҡорт һәм рус фольклорында сәскә образына бәйле мәҡәл-әйтемдәр халыҡтың тәбиғәтте һәм ижтимағи тормошто күҙәтеүе, тәжрибәһе нигеҙендә тыуған. Көнкүреш тәжрибәһе, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр, әхлаҡ нормалары, ҡайһы бер тарихи ваҡиғалар, тәбиғәттәге төрлө күренештәр, йәғни халыҡтың бай, күп яҡлы һәм ҡатмарлы тормошо тәрән йөкмәткеле, образлы мәҡәлдәр рәүешендә формалашҡан. Йөҙәрләгән, меңәрләгән мәҡәлдәр тик хәл-ваҡиғаларҙы оҙаҡ йылдар күҙәтеү, уларҙы өйрәнеү һәм белеү һөҙөмтәһендә генә барлыҡҡа килә алған.

Икенсе бүлектә Т.С. Аксаквотың “Аленький цветочек” әҫәрендә сәскә образы өйрәнелде.

Әҫәрҙә тәбиғәт күренештәрен үҙәккә ҡуйып яҡтыртыуҙың унын айырым деталдәрен тасуирлауҙың маҡсаты – лирик геройҙың эске күңел донъяһын тәрәнерәк сағылдырыу. Бының менән автор тыуған яғы тәбиғәтенең төнгө гармонияһы лирик геройға ла хас икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алырға теләгән. Лирик геройҙың хис-тойғоларын, уй-фекерҙәрен туранан-тура асып, үҙенсәлекле ассоциация тыуҙырыусы тәбиғәттең илһамлы, саф сағын һүрәтләй. Сәскә образы лирик геройҙың уларға мөнәсәбәтен күрһәтеү, йәки үҙенсәлекле бер ассоциация тыуҙырыу өсөн ҡулланыла. Бының ярҙамында лирик геройҙың туранан-тура эске донъяһын сағылдырыу ыҡсымлаша, кинәйәле яңғыраш ала.

Тәбиғәт лирикаһы күп осраҡта, лирик характерҙағы махсус комментарийҙар бирмәй, тәбиғәт картиналарын һүрәтләү менән генә сикләнә. Сөнки лирик, эмоциональ башланғыс бында һүрәтләү объектының үҙендә, уның тонында сағыла. Әҙәби төрҙәр һымаҡ уҡ кешенең, йәғни

конкретлаштырып әйткәндә, геройҙың эске донъяһын бар тулылығында һәм нескәлегендә, уның характерын бар ҡатмарлығында һәм төрлөлөгөндә асырға ынтыла.[17]

## Ҡулланылған сығанаҡтар һәм әҙәбиәт исемлеге


1. Аксаков С.Т. Детские годы Багрова-внука. Семейная хроника. – Уфа: Башк.кн. из-во, 1991. – 150 с.
2. Аксаков С.Т. Детские годы Багрова-внука. Семейная хроника. – Уфа: Башк.кн.изд-во,1991. – 278 с.
3. Аленький цветочек ONLINE. Афиша. www.filspb.ru. Дата обращения: 21 мая 2020. Архивировано 20 сентября 2020 года.
4. Аленький цветочек. Сказка ключницы Пелагеи - Аксаков С.Т. (azbyka.ru)
5. Аникин В.П. Русская народная сказка – М.: Худож. лит., 1984. – 176 с.
6. Башҡорт Википедияһы (электрон ресурс): https://ba.wikipedia.org/wiki/Башҡорт_халыҡ_әкиәттәре.
7. Башҡорт халыҡ ижады = Башкирское народное творчество : әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады : сказки, предания, устные рассказы, творчество сэсэнов / мөх. Л. Бараг ; Н. Зарипов ; Кирәй Мәргән ; Ғ. Хөсәйенов ; төҙ. Н. Т. Зарипов; А. М. Сулейманов .– Өфө : Башҡортостан китап нәшриәте, 1982 .– 422 б.
8. Башҡорт халыҡ ижады. 10-сы том. 1-се китап. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. - Өфө: Китап, 2006. – 544 бит.
9. Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Өфө, 1980
10. Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. II китап. Тылсымлы героик әкиәттәр. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. – 344 б.
11. Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. V китап. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. – 392 б.
12. Бегунов Ю. Источники сказки С. Т. Аксакова «Аленький цветочек» // Русская литература. 1983. № 1. – С. 179-187.
13. Кравцов Н.И., Лазутин С.Г. Русское устное народное творчество: Учебник для фил. спец. ун-тов. – 2-е изд., испр. и доп. – М.: Высш. шк., 1977. – 448 с.
14. Кульсарина Г.Г. Язык и стиль башкирских народных сказок: дис. …канд. филол. наук. – Уфа: БашГУ, 2004. – 165 с.


[17] Башҡорт халыҡ ижады = Башкирское народное творчество : әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады : сказки, предания, устные рассказы, творчество сэсэнов / мөх. Л. Бараг ; Н. Зарипов ; Кирәй Мәргән ; Ғ. Хөсәйенов ; төҙ. Н. Т. Зарипов; А. М. Сулейманов .– Өфө : Башҡортостан китап нәшриәте, 1982 .– 422 б.

15. Ҡунафин Ғ.С. Замандарҙың рухи балҡышы. Әҙәбиәт теорияһы, тарихи поэтика мәсьәләләре, ижади портреттар, әҙәби тәнҡит мәсьәләләре. – Өфө: Китап, 2006. – 492 бит.

16. Сөләймәнов Ә.М. Халыҡтың юмористик сәсмәүере: жанр төрләлеге һәм поэтик үҙенсәлектәре. – Өфө: Ғилем, 1998. – 159 б.

17. Сөләймәнов Ә.М. Әкиәттә хәҡиҡәт: башҡорт халыҡ көнкүреш әкиәттәренең жанр составы, сюжет төрләлеге, тормош ерлеге. – Өфө: Китап, 1997. – 400 б.

18. Alenjkij cvetochek.pdf (sd-inform.org)